## Ғайсаның Мәсих тыуыуы

1 Ул көндәрҙә, Август ҡайсар тарафынан, бөтә империяла халыҡ
иҫәбен алыу тураһында әмер бирелгән. 2 Был Сүрияла, Күрини
идара иткән ваҡытта үткәрелгән беренсе иҫәп алыу булған. 3 Һәр
кем яҙылыу өсөн үҙ ҡалаһына киткән. 4 Йософ та, Гәлиләялағы
Насаранан Йәһүдияға Дауыттың Бәйтлехем тип аталған ҡаяаһына
киткән, сөнки ул үҙе Дауыт йортонан һәм нәҫеленән булған. 5 Унда
ул үҙенә ҡатынлыҡҡа никахлаштырылған һәм йөклө булған
Мәрйәм менән бергә барған. 6 Улар Бәйтлехемда саҡта Мәрйәмдең
бала тыуҙырыу ваҡыты еткән, 7 Һәм ул үҙенең беренсе Балаһын —
Улын тыуҙырған, Уны йүргәккә төргән һәм ҡунаҡханала урын
булмағанлыҡтан, Уны утлыҡсаға һалған. 8 Ул тирәлә көтөүлектә
көтөүселәр булған. Улар төндәрен мал ҡарауыллағандар. 9 Шул
төндә кинәт уларға Раббының бер фәрештәһе күренгән, уларҙы
Раббының даны balҡытҡан һәм улар бик ныҡ ҡурҡҡандар. 10
Фәрештә уларға әйткән: «Ҡурҡмағыҙ! Мин һеҙгә бөтә кешеләр өсөн
бик шатлыҡлы буласаҡ Яҡшы Хәбәр килтерҙем; 11 Бөгөн Дауыт
калаһында һеҙҙе ҡотҡарыусы тыуҙы, ул Раббы Мәсих. 12 Бына
һеҙгә билдә — ул биләүгә биләнгән килеш утлыҡсала ята». 13
Ҡапыл фәрештә менән бергә бик күп күк ғәскәре күренгән һәм улар
Алланы данлап: 14 «Иң юғарылағы Аллаға дан, Алла илтифаты
булған һәр кешегә ерҙә тыныслыҡ», - тигәндәр. 15 Фәрештәләр
күккә күтәрелеп киткәндән һуң, көтөүселәр бер-береһенә: «Әйҙәгеҙ,
Бәйтлехемға барайыҡ, Раббы беҙгә белдергәнсә, унда нимәләр
булғанын күрәйек», — тигәндәр. 16 Улар ашығып шунда барғандар
һәм унда Мәрйәм менән Йософто, шулай уҡ утлыҡсала ятҡан
Баланы күргәндәр. 17 Уны күргәс, улар был Бала хаҡында үҙҙәренә
нимә хәбәр ителгән булһа, шуны бүтән кешеләргә һөйләгәндәр. 18

Көтөүселәрҙең һөйләгәндәрен тыңлағас, барыһы ла ғәжәпләнгән. 19
Мәрйәм иһә, был һүҙҙәрҙе күңелендә һаҡлаған. 20 Көтөүселәр бар
нәмәнең үҙҙәренә фәрештә һөйләгәнсә булыуын ишетеп һәм күреп,
Алланы данлап, маҡтап кире ҡайтҡандар.